# Уйындан – үҫешкә

**Дидактик уйындар**



# Уйындан — үҫешкә



## Дидактик уйындар







***(күргәзмәле дидактик ҡулланма)***

**Беренсе бүлек**

*Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде*

Зәйнәб Бишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ · 2010

УДК 372.016:811.512.141
ББК 74.268.0 Баш
А 30

**Аҙнабаева Ф. Ғ., Әғзәмова З. Ә.**

А 30 Уйындан – үҫешкә. Дидактик уйындар: мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн. Беренсе бүлек. – Өфө: Китап, 2010. – 72 бит.

ISBN 978-5-295-05155-5

Дидактик уйындар баланы тирә-йүн менән таныштырыу, ябай математик төшөнсәләрҙе формалаштырыу, физик һәм музыкаль тәрбиә биреү, художество-эстетик һәм телмәр үҫтереү эшмәкәрлегендә өйрәнелгән материалдарҙы нығытыу, дөйөмләштереү, сағыштырыу, танып белеүен үҫтереү маҡсатын үҙ эсенә ала.

**УДК 372.016:811.512.141**
**ББК 74.268.0 Баш**

**ТП – 023/10**

**ISBN 978-5-295-05155-5**

© Аҙнабаева Ф. Ғ., Әғзәмова З. Ә., 2010
© Василов А. Ә. һүрәттәре, 2010
© Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2010







## Хөрмәтле балалар баҡсаһы тәрбиәселәре һәм ата-әсәләр!

Һеҙҙең иғтибарға мәктәпкәсә йәштәге балалар үҫешенә булышлыҡ итеүсе дидактик уйындар тәҡдим ителә.

Дидактик уйындар ике йәштәге һәм унан өлкән йәштәге бала менән индивидуаль йәки бер нисә бала менән уйнауҙы күҙаллай.

Дидактик уйындарҙың бер нисә вариантта бирелеүе мөмкин.

Мәктәпкәсә йәштәге балаға уйын – шәхес үҫеше сығанағы ул. Бала уйын эшмәкәрлегеләре аша үҫешә. Дидактик уйындар баланы тирә-йүн менән таныштырыу, ябай математик төшөнсәләрҙе формалаштырыу, физик һәм музыкаль тәрбиә биреү, художество-эстетик һәм телмәр үҫтереү эшмәкәрлегендә өйрәнелгән материалдарҙы нығытыу, дөйөмләштереү, сағыштырыу, танып белеүен үҫтереү маҡсатын үҙ эсенә ала.

Төҫлө сағыу һүрәттәр баланы үҙенә тартып тора, ә уларҙы ҡулланып уйнап, һеҙ баланың хәтерен, зиһенен, иғтибарын, телмәрен һәм фекерләү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәкһегеҙ.

Дидактик уйындарҙа бирелгән күнекмәләр балаға үҙ аллы төрлө ҡыҙыҡлы эштәрҙе үтәп, үҙенең белемен нығытыуға һәм белем кимәлен башҡаларға күрһәтеп, тиҫтерҙәре һәм ололар менән аралаша белеүенән ҡыуаныс һәм шатлыҡ хистәре кисереүгә мөмкинселек бирәсәк.

Дидактик уйындар ҡулланмаһы менән нисек эшләргә:

1. Тәүҙә уйындың йөкмәткеһенә ярашлы, маҡсатҡа төшөнөгөҙ.
2. Уйындың атамаһын, балаға нимәгә иғтибар итергә кәрәклеген аңлатығыҙ.
3. Бала менән бергәләп уйында бирелгән һүрәттәрҙе ҡарағыҙ.
4. Уйын ҡағиҙәләрен тәүҙә үҙегеҙ өйрәнеп, үтәп ҡарағыҙ, унан һуң ғына балаға аңлатып төшөндөрөгөҙ.
5. Баланың уйын маҡсатын үҙенсә хәл итә алыуын һорап белешегеҙ, әгәр ул эш барышын дөрөҫ билдәләһә, үҙ аллы уйнарға йәки уйын ойошторорға тәҡдим итегеҙ.

# ДИДАКТИК УЙЫНДАР

## «БЕРӘҮ ҺӘМ КҮП»

**Маҡсат:** балаларҙы берәү һәм күп төшөнсәләрен дөрөҫ ялғау ҡушып әйтә белергә өйрәтеү. *Бер һуған – күп һуғандар*. Баланың күҙаллауын, аҡыл, зиһенен үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар һүрәткә ҡарап, ялғау ярҙамында әйберҙең нисәү: берәүме әллә күпме икәнен дәлилләй. Мәҫәлән: бында бер һуған – ул берәү, бында күп һуғандар – улар күп.

Уйын өҫ йәштән тәҡдим ителә. Бер бала йә төркөм менән үткәрелә.



















## «БЕР ҺҮҘ МЕНӘН ӘЙТ»

**Маҡсат:** балаларҙы тирә-йүндәге предметтар, уларҙың үҙенсәлектәре, сифаттары менән таныштырыу һәм уларҙы аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәтеү. Атамаларын дөрөҫ әйтә белергә, уларҙың төрҙәрен дөйөмләштерергә өйрәтеү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар предметлы һүрәттәрҙе атап, төркөмләштереп, дөйөм бер һүҙ менән генә әйтәләр. Предметтарҙың ниндәй материалдан булыуын һәм уларҙың тәғәйенләнешен иҫбатлайҙар.

Был уйын өс йәштән тәҡдим ителә. Бер нисә бала менән йә төркөм менән уйнарға мөмкин.







## «НИМӘ НИСЕК ХӘРӘКӘТЛӘНӘ?»

**Маҡсат:** балаларҙы предметтың хәрәкәттәрен аңлатҡан һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөргә һәм әйтергә өйрәтеү. «Нимә эшләй?» һорауын аңлау һәм яуап биреү. Баланың танып белеү, фекерләү ҡеүәһен һәм телмәрен үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** I вариант. Һәр бер балаға предметлы һүрәт төшөрөлгән карточка бирелә. Алып барыусы берәй хәрәкәтте әйтә, уйнаусылар шундай хәрәкәтте башҡара алыусы йәнлекте атай. «Нимә эшләй?» һорауына ҡарата тулы һәм дөрөҫ яуап ҡайтарырға тейеш.

II вариант. Балалар йәш үҙенсәлектәренә таянып, үҙен уратып алған предметлы һүрәттәрҙе дөйөмләштереп әйтә.

Уйын ике-өс йәштән тәҡдим ителә.



























## «НИМӘ АРТЫҠ?»

**Маҡсат:** балаларҙы предметтарҙың төп үҙенсәлектәре менән таныштырыу, уларҙы төркөмләргә өйрәтеү. Балаларҙың иғтибарын, фекерләүен, аң-зиһенен, телмәрен үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Ойоштороусы балаға дүрт һүрәтле карточка бирә. Уларҙың өсөһө бер төркөмдән, дүртенсеһе икенсе төркөмдән. Балалар артыҡ предметты табалар.

Был уйын дүрт йәштән тәҡдим ителә. Индивидуаль йәки төркөм менән үткәрелә.




























## «ХАТАҺЫН ТӨҘӘТ»

**Маҡсат:** балаларҙы предметтың үҙенсәлектәрен, хәрәкәт итеүен сағыштырып, баһалап, схемалағы хатаны табып, ни өсөн был төркөмгә ул урынһыҙ икәнлеген дәлилләргә өйрәтеү.

Күҙәтеүсәнлек, иғтибарлылыҡ, зирәклек, отҡорлоҡ тәрбиәләү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар алдына төрлө хәрәкәт төрҙәренә эйә булған ҙур предметлы һүрәттең схемаһы тәҡдим ителә. Кем тиҙерәк хатаһын табып әйтеп, артыҡ предметты ҡағыҙ бите менән ҡаплай, шул еңеүсе.

Был уйын ике йәштән тәҡдим ителә. Уйында дүрт бала уйнарға мөмкин.


ҺИКЕРӘ


йөҙә


ОСА


ШЫУЫША

## «НИНДӘЙ ӘКИӘТТӘН ГЕРОЙҘАР?»

**Маҡсат:** балаларҙа башҡорт әкиәтенең геройҙарын ниндәй әкиәттән икәнен танып белеүен, әкиәт геройҙарында булған дуҫлыҡ, тоғролоҡ, эшсәнлек, сыҙамлылыҡ һәм тәбиғәт йәнлектәренә мәрхәмәтлелек күрһәткән сифаттарын тәрбиәләү. Баланың танып белеү даирәһен киңәйтеү, фекерләү ҡеүәһен һәм телмәрен үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар ике командаға бүленә. Беренсе команда бирелгән һүрәттәге әкиәт геройы тураһында йомаҡ ҡуя, ә икенсе команда ниндәй әкиәттең геройы икәнен әйтергә тейеш. Әгәр ҙә дөрөҫ яуап алынһа, беренсе команда икенсе командаға һүрәтте күрһәтә.

Уйын биш-алты йәштән тәҡдим ителә. Уйын ике команда менән үткәрелә.







## «ГЕОМЕТРИК ФИГУРАЛАРҘЫ ТАП ҺӘМ ТӨҪӨН ӘЙТ»

**Маҡсат:** балаларҙы геометрик фигураларҙың төҫтәре, формалары менән таныштырыу. Һүрәткә ҡарап, геометрик фигураларҙы табып, төҫтәрен айырырға, атарға өйрәтеү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар сюжетлы һүрәтте иғтибар менән ҡарап, геометрик фигураларҙы табып, атай, уның ниндәй төҫтә, формала икәнен әйтә.

Был уйын ике-өс йәштән тәҡдим ителә.









## «ҠАПМА-ҠАРШЫ ҺҮҘҘӘР»
## (антонимдар)

**Маҡсат:** контраст предметтарҙы сағыштырып, «киң – тар», «ҙур – бәләкәй», «бейек – тәпәш», «оҙон – ҡыҫҡа», «йыуан – нәҙек», «эҫе – һыуыҡ», «шәп – яй» төшөнсәләрен аңлап, айырып әйтә һәм тирә-йүн предметтарында таба белеү. Балаларҙың аң-зиһен, уйлау етеҙлеген, һүҙ байлығын, тапҡырлығын үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Балалар һүрәткә ҡарап дәүмәле буйынса сағыштырып дөрөҫ итеп әйтә. Мәҫәлән: киң – тар, бейек – тәпәш, оҙон – ҡыҫҡа.

Был уйын ике-өс йәштән тәҡдим ителә. Бөтә төркөм йә бер нисә бала менән үткәрелә.

## «КИҢ — ТАР»





## «БЕЙЕК — ТӘПӘШ»



# «ОҘОН — ҠЫҪҠА»



## «ҘУР — БӘЛӘКӘЙ»





## «ӨЛӨШТӘРҘӘН ЙЫЙ»

**Маҡсат:** төрлө өлөштәргә бүленгән һүрәттәрҙән бер бөтөндө йыйыу, оҡшашлығы һәм айырмаһы буйынса предметтарҙы дөйөмләштерергә өйрәтеү. Ҡул суктарының хәрәкәтсәнлеген, ваҡ моториканы үҫтереү.

**Уйын ҡағиҙәһе.** Өҫтәлдә ятҡан өлөштәргә, киҫәктәргә, ярсыҡтарға бүленгән предметлы һүрәттәрҙе һайлап алғанда яңылышмаҫҡа. Кем иң беренсе үҙенең һүрәтен йыя һәм атамаһын әйтә – шул еңеүсе була. Балаларға һүрәттәрҙе йыйып алып, бер бөтөн итеп йыйырға ҡушыла.

Был уйын өс йәштән тәҡдим ителә. Уйын өс йәштән бер бала менән, ә биш йәштән төркөмсәләп үткәрелә. Уйында бер-өс бала уйнарға мөмкин.







## Йөкмәткеһе

Инеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Дидактик уйындар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4
«Берәү һәм күп» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4
«Бер һүҙ менән әйт» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .10
«Нимә нисек хәрәкәтләнә?» . . . . . . . . . . . . . . . . .18
«Нимә артыҡ?» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .26
«Хатаһын төҙәт» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .34
«Ниндәй әкиәттән геройҙар?» . . . . . . . . . . . . . . .42
«Геометрик фигураларҙы тап һәм төҫөн әйт» . . . . . . .50
«Ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр» (антонимдар) . . . . . . . . . . .58
«Өлөштәрҙән йый» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .66

Учебное издание

**АЗНАБАЕВА Фирдаус Гисовна**
**АГЗАМОВА Зульфия Агзамовна**

**ИГРАЯ РАЗВИВАЕМСЯ**

*наглядное дидактическое пособие для дошкольников*

часть первая

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *Сәйҙә Рәхимова*
Мөхәррире *Алһыу Иҙелбәкова*
Рәссамы *Артур Васалов*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сынғыҙова*
Корректоры *Гөлсирә Таһирова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.10.2010. Форматы 60 x 90 1/8. Офсет ҡағыҙы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 9,0. Шартлы буяу отт. 38,0.
Иҫәп-баҫма таб. 4,95. Тиражы 10 200 дана. Заказ 101154.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река»
нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Киров урамы, 109.